Муниципаль белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

**Дөйөм ата-әсәләр йыйылышында сығыш:**

# Шиғырҙар, әҙәбиәт аша мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхләки – патриотик тәрбиә биреү

Тәрбиәсе:
Йыһангирова
Гөлнара
Марат ҡыҙы

# Шиғырҙар, әҙәбиәт  аша  мәктәпкәсә йәштәге балларға әхләки- патриотик  тәрбиә биреү

Хөрмәтле ата-әсәләр, коллегалар. Бөгөнгө көндә әхләки –патриотик тәрбиә биреү буйынса  бик күп эш алып барабыҙ. Мин, Йыһангирова Гөлнара Марат ҡыҙы, күптәрегеҙгә танышмын.

Үткән йыл үҙемдең төркөмөмдә  йөрөгән  балалар менән Рауил Бикбаевтың юбилей концертында сығыш яһаныҡ. Йыл һайын балалар баҡсаһында "Нәфис һүҙ" оҫтаһы бәйгеһен үткәрәбеҙ. " Урал батыр" эпосын һөйләү конкурсы ла ҙур ҡаҙаныштар алып килде.Театр конкурсында ла һынатманыҡ. Ошо    көндәрҙә балалар баҡсаһы һәм ҡала кимәлендә үткәрелгән әкиәт һөйләү оҫталары бәйгеһенә әҙерләнәбеҙ.

Үҙемдең шиғырҙарыма килгәндә улар "Гөлсәсәк" һәм "Минең яҡын дуҫтарым" шиғри йыйынтыҡтарына тупланған. Кескәй балаларға яҙылған шиғырҙарым тыуған ергә, тәбиғәткә, ғаиләгә һөйөү менән һуғарыла. Шулай уҡ "Мин шәхес" һәм "Балалар баҡсаһында  театр эшмәкәрлеге" методик әсбәптәре лә әхләки -патриотик тәрбиә биреү эштәренә дәлил. Шиғырҙарымды балалар  төрлө милли байрамдарҙа иртәлектәрҙә һөйләйҙәр. 21 шиғырыма көй яҙылған. Балалар бик теләп йырлайҙар.

Әгәр мөмкин булһа һеҙгә бер нисә шиғырымды уҡып ишететрергә теләйем

Дуҫлыҡ, тоғролоҡ тураһында Ике дуҫ шиғыры

**Ике дуҫ**

Бик дуҫлашып киткәндәр
Ҡуян менән суҙ турғай
Улар хәҙер көн һайын
Тышта бергәләп уйнай.
Әйҙә һикерәйек ти,
Ҡуян бөгөн турғайға
Йүгерешеп үтәйек
Еткәәнсе,ти, туғайға.
Мин йүгерә белмәйем
Мин осорға яратам

Һикерәм тип аяғымды
Ауырттырһам ҡалайтам?
Ҡуян һикереп күрһәтте,
Турғайы өҫкә осто
Ҡанат менән аяҡ ҡына
Айырмаҫ ике дуҫты.

Сабырлыҡ, тырышлыҡ тураһында Өкө дәрес үткәрә шиғыры

## Өкө дәрес үткәрә

Өкө дәрес үткәрә,
А өнөн ул өйрәтә
Таҡтаға матур итеп
“А”-ны яҙып күрһәтә.

Ҡусҡар әйтә: ”А - А”
Ә күбәләк фыр ҙа фыр
“А”– ны дөрөҫ әйтмәнең бит,
Ҡабаланма тороп тор!

Ғаилә, ярай- ярамай һүҙәренең мәғәнәһен аңлатҡан Шуҡ сысҡан шиғыры

## Шуҡ сысҡан

Күҙҙәрен йылтыратып
Сысҡан ҡарай тишектән.
Әллә өләсәйемдең
Һөйләгәнен ишеткән.

Өләсәй әйтә, сысҡан,
Ҡайҙан һуң тишек тапҡан?
Унан ҡотолор өсөн,
Ҡуйырға кәрәк ҡапҡан.

Сысҡан ҡыуана, һеҙҙең
Ишеттем һөйләшкәнде
Йүгереп кенә ҡайтып,
Күреп килдем әсәмде.

Тыуған ер, тыуған ҡалаға һөйөү менән һуғарылған
Сибайым – тыуған ҡалам шиғыры

## Сибайым – тыуған ҡалам

Пеләш башлы Ирәндектең
Сал ҡылғанлы далаһы.
Алтын юбилейын данлай
Сибай тигән ҡалаһы.
Һүҙгә йомарт, эшкә оҫта,
Йыр һөйөүсән, бейеүсе,
Киләсәккә ышыныслы,
Һәр бер эшсе, төҙөүсе.
Гүйә, әкиәт ҡаласығы:
Үҫеп сыға йорттары,
Талиптары гөжләп тора,
Нәҡ, умарта ҡорттары.
Ҡотло булһын юбилейың
Сибайым – тыуған ҡалам.
Йәшлегең, матурлығыңа
Гелән, һоҡланып ҡалам.